# Дистанцион дәрес конспекты

*Уҡытыусы:* Атанғолова Рәсимә Әхмәҙулла ҡыҙы;

*Мәктәп:* Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернаты.

*Тема:* Минең өйөм. (Минең йортом).

*Маҡсат:* төрлө ерҙәрҙә йәшәгән милләттәштәрҙе туған башҡорт теленә өйрәтеү, һүҙлек байлыҡтарын арттырыу, бәйләнешле телмәрҙәрен үҫтереү, туған телгә, тыуған Башҡортостанға һөйөү, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

***Дәрес барышы:***

**I. Сәләмләү:** Хәйерле көн теләп ҡояш ҡалҡа,
Уяналар ауыл, ҡалалар.
Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем:
Хәйерле көн, дуҫтар, туғандар!
Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле милләттәштәр, ҡан-ҡәрҙәштәр!

**II. Таныштырыу:** Бөгөнгө дәрестә һеҙҙе сәләмләүемә бик шатмын. Мин Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Атанғолова Рәсимә Әхмәҙулла ҡыҙы.

- Ҡәҙерле милләттәштәр! Дәрес алдынан һеҙҙең барығыҙҙан да микрофондарығыҙҙы ябыуығыҙҙы һорайым.

**III. Теманы асыу өсөн һорауҙар:** ( Һүрәттәр күрһәтеү. Өй, аш-һыу, йоҡо бүлмәһе, кәштә һ.б. )
- Хәҙер экрандағы һүрәткә иғтибар итәбеҙ.
-Һүрәттә нимә күрәһегеҙ? (Өй)
- Ә был нимә? (Күп ҡатлы йорт)
- был һүрәттә нимә күрәһегеҙ? ( Аш-һыу бүлмәһе)
- Ә был ниндәй бүлмә? (Йоҡо бүлмәһе)
-Тимәк, беҙ нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?

- Эйе, өй, йорт тураһында һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ. Яңы һүҙҙәр менән танышасаҡбыҙ.

**IV. Теманы дауам итеү, үҫтереү. Йорт йыһаздары.**

-Иғтибар менән экранға ҡарайбыҙ.

**1.Һүҙлек эше:**

Һыуытҡыс – холодильник,

Кер йыуыу машинаһы – стиральная машина,

Өçтәл – стол,

Ултырғыс – стул,

Кәштә – полка,

Китап кәштәһе – книжная полка,

Кейем шкафы – платяной шкаф,

Карауат – кровать,

Элгес – вешалка,

Тәҙрә – окно

( Тәүҙә һүрәтте күрһәтеп әйтеп сығыу; шунан бергәләп ҡабатлау, үҙҙәренән әйттереп сығыу, тәржемәһе менән ҡабатлау);

**V. Мәҡәлдәр менән эш.**
**Мәҡәлдәрҙең тәржемәһен табырға (ике бағанала):**

-Ҡәҙерле уҡыусылар! Башҡорт телендә өй, йорт тураһында мәҡәлдәр ҙә бик күп. Хәҙер шулар менән танышайыҡ.

Ҡунаҡта һәйбәт, өйҙә яҡшыраҡ.      Мой дом – моя крепость.

Минең йортом – минең ҡәлғәм.       Не дом хозяина красит,а хозяин – дом.

Йорт хужаны биҙәмәй, хужа йортто биҙәй. В гостях хорошо, а дома лучше.

(Тәүҙә мәҡәлдәрҙе уҡып күрһәтеү. Шунан минең арттан ҡабатлау. Үҙҙәренән уҡытыу. Тәржемәһен табыу).

**Диалог.**

**-Тағы өйгә бәйле ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ?**

Өй тупһанан башлана. (Хозяина видать по двору).
Өйөңдәге хәлде күршеңдән һораш. (Спроси в людях, что дома делается).
Өйө бейек тә, өйрәһе шыйыҡ (Дом высок, да под ним песок).

**VI. Ял минуты.** ( “Ата йорто” йырын тыңлау).

-Ҡәҙерле милләттәштәр! Хәҙер беҙҙең гимназия уҡыусыһы Тимеров Арслан башҡарыуында “Ата йорто” йырын тыңлап, ял итеп алайыҡ.

**VII. Бәйләнешле телмәр үҫтереү.** (**Экранда бүлмә һүрәте. Һүрәт буйынса уҡыусыларҙан һөйләтеү.**

-Ҡәҙерле уҡыусылар! Кем ошо экрандағы һүрәткә ҡарап һөйләй ала? Был ниндәй бүлмә? Унда нимәләр бар?

(Төрлө бүлмә һүрәттәре. Мәҫәлән: Был аш-һыу бүлмәһе. Бында һыуытҡыс, кер йыуыу машинаһы, өҫтәл, ултырғыс бар.)

**VIII. Диалог. Һорауҙарға тулы итеп яуап бирегеҙ:**

| | | |
|---|---|---|
| | *һыуытҡыс* | |
| | *Карауат* | |
| | *ултырғыс* | |
| | *кресло* | |
| | *кейем шкафы* | *бармы?* |
| | *китап кәштәһе* | |
| *Һинең бүлмәңдә* | *тәҙрә* | |
| | *диван* | |
| | *ишек* | |
| | *Компьютер* | |

**Өлгө:** Юҡ, минең бүлмәлә һыуытҡыс юҡ.
Эйе, минең бүлмәлә диван бар.

| | | |
|---|---|---|
| | һыуытҡыс | |
| | карауат | |
| | ултырғыс | |
| Эйе, минең бүлмәмдә | кейем шкафы | бар. |
| (Юҡ, минең бүлмәмдә) | китап шкафы | (юҡ). |
| | тәҙрә | |
| | диван | |
| | компьютер | |

**IX. Өй, йорт, йыһаздар темаһына йомаҡтар:**

-Уҡыусылар! Әйҙәгеҙ, өй, йорт тураһында белгән йомаҡтарҙы иҫкә төшөрәйек. Кем ниндәй йомаҡ белә?

Бәләкәй генә йорт , эсе тулы ҡорт. (Ҡыяр).
Өй башында айыу бейей. (Төтөн).
Өй башында ярты икмәк. (Ай).
Тәҙрәһе юҡ, түбәһе тишек. Ямғыр үтмәй, ел өрмәй. (Тирмә).
Дүрт апайға бер яулыҡ. (Өҫтәл).
Ауыҙы юҡ, теле юҡ,
Һөйләмәгән көнө юҡ.
Бер ҙә тынып тормай ул,
Һөйләп туйғас, йырлай ул. (Радио).
Теле юҡ-һүҙе бар.
Күҙе юҡ-күрһәтә,
Бар нәмәне өйрәтә. (Телевизор).

**XI. Тирмә һүрәте килеп сыға.**

- Был тирмә беҙҙең темаға нимәһе менән бәйле?
- Борон тирмәне кемдәр ҡорған?
- Хәҙерге заманда тирмә ҡоралармы?
- Уны ҡайҙа күрергә була?
- Тирмәне нисек, нимәнән эшләйҙәр?
- Ул ниндәй формала була?



**Тирмә** — күсмә халыҡтарҙың ваҡытлыса йәшәү торлағы. Унда тәбиғәт ҡосағында йәшәгәндәр. Был ҡоролма башҡорттарға ла хас булған.
Башҡорт тирмәһенең бер нисә төрө була:
а) «тирмә» — традицион көнкүреш тирмәһе;
б) «аш тирмә» — аш-һыу әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән тирмә;
в) «ҡунаҡ тирмә», «аҡ тирмә» — аҡ кейеҙ менән ябылған ҡунаҡ ҡаршылау өсөн тәғәйенләнгән тирмә;
г) «Ун ике ҡанатлы аҡ тирмә» — иң ҙур тирмә — ырыу башлыҡтарына, хандарға тәғәйенләнгән.

**XII. Йомғаҡлау.**

- “Йорт” һүҙе ил, төбәк мәғәнәһен дә бирә. Боронғо башҡорт эпостарында йорт образы ил, халыҡ, тыуған ер, дәүләт мәғәнәһендә бына нисек бирелә:

Урал – атым тыуған йорт,
Урал – атым үҫкән йорт,

Йылҡы малы тулған йорт;
Бейә һауған һөтлө йорт;
Ҡымыҙ эскән ҡотло йорт;
Ынйы-мәрйен таҡҡан йорт;
Аҡбуҙ толпар юлынан
Урал тауы тыуған йорт;
Яйыҡ, Иҙел батырҙар,
Бары шунда булған йорт;
Уларҙан тыуған балалар,
Үҙ ырыуын йәйгән йорт.
Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъяндар,
Юрматыһы, бүтәндәр
Ете ырыуын йыйған йорт.

*(Экранда Уралтау һүрәте)*

- Эйе, беҙҙең башҡорт халҡы өсөн Урал, Башҡортостан – тыуған йорт, тыуған ер, баш йорт! Хатта Башҡортостандан ситтә йәшәгәндәр өсөн дә Башҡортостан баш йорт булып ҡала. *(Экранда Өфө һүрәте)*

- Һеҙ минең менән килешәһегеҙме? Башҡортостанды үҙегеҙҙең баш йортоғоҙ тип әйтә алаһығыҙмы? (Диалог)

-Эйе, сөнки Башҡортостандан ситтә булһағыҙ ҙа унын йылыһын тояһығыҙҙыр.

Бер-беребеҙҙән алыҫ булһаҡ та аралашып йәшәйек!

- Хушығыҙ! Һау-сәләмәт булығыҙ!